Государственное бюджетное общеобразовательное учреждение
Стерлибашевская коррекционная школа-интернат для обучающихся
с ограниченными возможностями здоровья

Рассмотрено на заседании
ШМО старшего звена

Протокол № 5 от
« 29 » мая 2018 г.
Руководитель Каримова АА.

Согласовано

Заместитель директора по
УР
_____ Гайнуллина Д.Р.

« 31 » 08 2018 г.

Утверждаю

Директор
_____ Афанасьев А.А.

« 3 » 09 2018 г.

# Рабочая программа
# по башкирскому (государственному)языку
# для 5б класса

**Срок реализации программы 1 год**

**учитель**
**Хуснетдинова Ф.С.**

2018-2019 учебный год

## Аңлатма яҙыу

Һаулығы буйынса мөмкинселеге сикләнгән уҡыусыларҙың 5б класы өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.
Эш программаһы В.В.Воронкованың VIII-се төрҙәге махсус(коррекция) дөйөм белем биреү һәм АООП Стәрлебаш һаулығы буйынса мөмкинселеге сикле уҡыусыларҙың махсус (коррекция) дөйөм белем биреү программаһына нигеҙләнеп төҙөлдө.
**Дәреслек:** Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 2-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 2008.
**Программа кимәле:** базис.
**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты :**
Ғәбитова З.М, Толомбаев Х.А Урыс мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр; Өфө: Башҡортостан.
**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты**
Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 2-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2008.
**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:** Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Толомбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Г.- Ижевск: «Книгоград», 2008.
Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа И.Ш.Мөҡсинов исемендәге муниципаль бюджет дөйөм белем биреү гимназияһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.
**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:**
«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.
**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән.**
Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеү мөһим бурыс.
Тел менән әҙәби материал бергә ҡушып өйрәнелә( интеграция).
Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә( коммуникатив йүнәлеш).
**Маҡсаттар һәм бурыстар.**
Башҡорт теленә өйрәтеү буйынса 5б класс уҡыусылары алдында түбәндәге бурыстар ҡуйыла:
Түбәнге класта өйрәнелгән материалдарҙы телмәрҙә ҡулланыу.
Тәҡдим ителгән темалар буйынса балаларҙың һүҙлек составын арттырыу, телмәр күнекмәләрен камиллаштырыу.
Балаларҙың уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.
Ситуациялар, темалар буйынса һорауҙар биреү, шул һорауҙарға һүрәт, картина, текст нигеҙендә яуап бирә белеү.
Темаға тап килгән шиғырҙар ятлау, йырҙар өйрәнеү һәм башҡарыу,
Һәр тема буйынса эш барышында тыуған Республика менән танышыуҙы дауам итеү.
Башҡорт халҡына, тарихына, Башҡортостан тәбиғәтенә, сәнғәтенә, әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү.
**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**
**Мин Башкортостанда йәшәйем - 1 сәғәт**.

Башҡортостандың ҡалалары, ауылдары, йылғалары, күлдәре тураһында мәғлүмәт биреү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау, темаға ҡараған башҡорт һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен камиллаштырыу.

**Ҡабатлау – 1 сәғәт.**

1-се, 2-се, 3-сө класта өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре, һөйләмдә һүҙҙәрҙең урыны.

**Һаумы мәктәп – 2 сәғәт.**

Балаларҙың үҙҙәре уҡыған мәктәп, уның үҙенсәлекле билдәләрен, урынлашыуын, кабинеттарын белеүе. Һүҙҙәрҙең предметты, билдәне, эште белдереүе.

**Мәктәп баҡсаһы – 2 сәғәт.**

Мәктәп баҡсаһы, еләк-емештәр, уларҙың ҡыуаҡтары, балаларҙың баҡсалағы эштәре. Ошо темаға ҡараған һүҙҙәр, уларҙы дөрөҫ әйтеү. *Һәм, ә, ләкин* теркәүестәрен ҡулланыу.

**Беҙҙең класс – 3 сәғәт.**

Мәктәп, класс бүлмәләре, дәрестәр, кластағы уҡыусылар, уларҙың эштәре. Темаға ҡараған һүҙҙәрҙе өйрәнеү. Һүҙҙәрҙә ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар.

**Ғаилә – 2 сәғәт.**

Үҙенең ғаиләһе, ғаилә ағзалары, уларҙың эштәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте тураһында һөйләшеү. Башҡорт телендә эйәлек ялғауҙарын практик үҙләштереү.

**Аҙыҡ – түлек – 3 сәғәт.**

Аҙыҡ-түлек атамалары менән танышыу, башҡорт халыҡ аштары тураһында һөйләшеү. Килеш ялғауҙарын пратик үҙләштереү.

**Ҡайҙа?Ҡайҙан? – 2 сәғәт.**

Аҙыҡ-түлек, һауыт-һабаның атамалары. Уларҙы йыйыштырыу, таҙа тотоу. Һөйләмдә һүҙҙәрҙең урыны.

**Нимә менән?- 2 сәғәт.**

Аш-һыу, аҙыҡ-түлек темаһына бәйле һүҙҙәр, уларҙың үҙенсәлектәрен белдереү. Аш-һыу әҙерләгәндәге ҡоралдар. *Менән* һүҙен практик ҡулланыу.

**Һанай беләһеңме? – 2 сәғәт.**

Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым хаҡы, уларҙың үлсәме, уларҙы һатып алыу, тәртипле тотоноу. Телмәрҙә һандарҙы практик ҡулланыу.

**Кейем-һалым – 3 сәғәт.**

Кейем-һалым исемдәре, уларҙың үлсәме, кейем һатып алыу, уларҙы бөхтә тотоу. Башҡорт телендә килеш һәм зат ялғауҙарын ҡулланыу.

**Уйындар, уйынсыҡтар – 3 сәғәт.**

Уйынсыҡ исемдәре, билдәләре, уйындар. Башҡорт телендә ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар.

**Һөнәрҙәр – 2 сәғәт.**

Кешеләрҙең һөнәрҙәре тураһында мәғлүмәт. Һөйләмдә хәбәрҙең урыны.

**Тән өлөштәре – 3 сәғәт.**

Кешенең организмы, тән өлөштәре атамаларын үҙләштереү, тәнде таҙа тотоу, һаулыҡты һаҡлау. Эйәлек алмаштарын һәм ялғауҙарын практик ҡулланыу.

**Таҙалыҡ. Көн тәртибе – 3 сәғәт.**

Шәхси гигиена, таҙалыҡты һаҡлау тураһында мәғлүмәт. Уҡыусының көн тәртибе, бөхтәлек, йыйнаҡлыҡ сифаттары тәрбиәләү. Башҡорт телендә юҡлыҡ ялғауҙары. Һүҙҙәрҙең һөйләмдәге урыны.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

**Уҡыу йылы аҙағында 5б класс уҡыусылары түбәндәге белем һәм күнекмәләргә эйә булырға тейеш:**

1. Һөйләгәнде йәки уҡығанды аңлай алыу (аудирование):

уҡытыусының, иптәшенең һөйләгәнен, уҡығанын аңлай алыу;

иҫәнләшеү, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү, ғәфү үтенеү, үтенесте белдереү, рөхсәт һорау (телмәр этикеты);

текстың йөкмәткеһе, ситуация буйынса һорау биреү.

2. Уҡыған текст буйынса, күҙәтеүҙәр нигеҙендә һөйләй белеү, ситуацияға ярашлы һөйләшеү (говорение):
бәләкәй күләмле текстың йөкмәткеһен һөйләү,
һүҙлек һүҙҙәрен белеү, уларҙы дөрөҫ ҡулланып һөйләү,
диалог төҙөү, төркөмдәрҙә һөйләшеү,
үҙең, ғаилә ағзалары, уларҙың исемдәрен белеү, һөнәр-шөғөлдәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте һ.б. тураһында һөйләү,
ваҡиғаға, персонажға үҙ мөнәсәбәтеңде әйтеп биреү,
башҡорт теленән руссаға һәм киреһенсә тәржемә итеү.
3. Уҡыу (чтение):
тексты дөрөҫ, шыма, талғын уҡыу (орфоэпик нормалар нигеҙендә),
поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу,
уҡыған текстың йөкмәткеһен билдәләй алыу, персонаждарын әйтеү,
текстан һорауҙарға яуаптар табыу, уҡып күрһәтеү.
4. Яҙыу (письмо):
хәрефтәрҙе матур, дөрөҫ, тейешле кимәлдә тоташтырып яҙыу,
ҙур булмаған тексты күсереп яҙыу.
**Уҡыу- уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштереүен баһалау.**
**Баһалар нигеҙҙә уҡыусыларҙы башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу дәртләндереү маҡсаты менән ҡуйыла.**

“5” билдәһе ҡуйыла: әгәр уҡыусы һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡыһа,паузаларға иғтибар итһә,һорауҙарға тулы яуап бирһә уҡылған текстың йөкмәткеһентулы итеп һөйләп бирһә

“4” билдәһе ҡуйыла: әгәр уҡыусы ижекләп уҡыһа,уҡығанда 1-2 хата ебәрһә,текстың йөкмәткеһен тулыитеп һөйләмәһә,шиғырҙарҙы уҡытыусы ярҙамында һөйләһә.

“3”-билдәһе әгәруҡыусы ауыр һүҙҙәрҙе ижекләп тәу уҡый алмаһа. Паузаларҙы дөрөҫ ҡулланмаһа. Текстың йөкмәткеһен уҡытыусы ярҙамында һөйләһә .

“2”-билдәһе. Әгәр уҡыусы ижекләп тә ауыр уҡыһа.уҡығанда ҡырыҫ хаталар ебәрһә,уҡылған текст буйынса һорауҙарға яуап бирә алмаһа уҡытыусының ярҙамын да ҡуллана алмаһа.

**Яҙма эштәрҙе баһалау**

Контроль эштәр: контроль күсереп яҙыуҙан тора.

**Контроль күсереп яҙыу**

“5”-хатаһыҙ дөрөҫ яҙылһа
“4”-бер хата һәм бер төҙәтеү
“3”- ике хата һәм бер төҙәтеү
Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә: тексты күсереп яҙыу, хәрефтәрҙе дөрөҫ тоташтырыу ,диалог уйнау.

Телмәр һәм зиһен // Аслаева Р. Өфө, Китап, 2005.
Урыҫ мәктәптәренең башланғыс синыфтарында башҡорт телен уҡытыу үҙенсәлектәре / Шарапов И.Ә. Өфө, Китап, 1997.

Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр // Ғәбитова З.М., Толомбаев Х.А. Өфө, Китап, 2006.

**Материал - техник ҡулланмалар**

Аудиокассеталар:

Туған тел. I – IV класс. 1 – 4 кассета, Өфө, 2005

Фәиз Шәрипов. Сыңрай ҡурай DANCE, Өфө, Моң.

CD диск:

Мөхәррам Сәлимов башҡарыуында балалар йырҙары.

Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудиоәсбап №1

Миңлеғәфүр Зәйнетдинов. Башҡорт ҡумыҙы.

Электрон дәреслектәр:

Башкирский язык. ru.

Балҡортостан иле.

Учебник башкирского языка, 1-4 классы.

**Төп һәм өҫтәлмә әҙәбиәт**

Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.

Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.

Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.

Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.

Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.

«Аҡбуҙат» журналы.

Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова

**5б класына түбәндәге эш төрҙәре тәкдим ителә**:

Контроль күсереп яҙыу-2

Контроль күсереп яҙыу күләме: 6-8 һүҙ

Календарь – тематик  планлаштырыу 5б синыфы

Программа буйынса: 68 сәғ
План буйынса:68 сәғ

| № | | Тема | План. дата | Факт. дата | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | 1.Тыуған Башҡортостан. | | | |
| 1 | 1.1 | Мин  Башҡортостанда йәшәйем. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 03.09 | | |
| | | 2.Ҡабатлау. | | | |
| 2 | 2.1 | “Һинә нимә кәрәк?”.Башҡорт теленең үҙенсәлекле өн- хәрефтәре. | 07.09 | | |
| 3 | 2.2 | Һин нимә эшләйһең? Ҡылымдың 1-се,2-се, 3-сө заты. | 10.09 | | |
| 4 | 2.3 | Был кемдең әйбере? Исемдәрзең эйәлек заты ялғауҙары. | 14.09 | | |
| 5 | 2.4 | Ҡайза? Һорауы. Ҡылымдың юҡлыҡ формаһы. | 17.09 | | |
| 6 | 2.5 | Ҡала урамында. Һһ өн-хәрефтәре. | 21.09 | | |
| | | 3. Һаумы,мәктәп! | | | |
| 7 | 3.1 | Күсереп яҙыу . “ Көҙ” . Һуҙынҡылар. | 24.09 | | |
| 8 | 3.2 | Хаталар ҫтөндә эш. Был кемдең…? Эйәлек алмаштары. | 28.09 | | |
| 9 | 3.3 | Беҙҙең мәктәп. Һөйләм төрҙәре. | 01.10 | | |
| 10 | 3.4 | Аҙна көндәре. Һөйләм төрҙәре. | 05.10 | | |
| | | 4.Мәктәп баҡсаһы. | | | |
| 11 | 4.1 | Беҙҙең мәктәп баҡсаһы. –мы,-ме, ялғауҙары. | 08.10 | | |
| 12 | 4.2 | Ҡасан? һорауы.  Һәм,ә,ләкин теркәүестәре. | 12.10 | | |
| | | 5. Беҙҙен синыф. | | | |
| 13 | 5.1 | Беҙҙең дәрестәр.Эштең элек,хәҙер булыуын белдереүсе һүҙҙәр. | 15.10 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 14 | 5.2 | Беҙҙең синыф. Ҡайҙа? Һорауы (урын-ваҡыт килеш). | 19.10 | | |
| 15 | 5.3 | Беҙҙең мәктәп. Ҡылымдың 1-се зат күплек ялғауы. | 22.10 | | |
| | | 6. Ғаилә. | | | |
| 16 | 6.1 | Беҙҙең ғаилә. Эйәлек(зат) ялғауҙары. | 26.10 | | |
| 17 | 6.2 | Күсереп яҙыу. “Көҙ етте”. | 05.11 | | |
| 18 | 6.3 | Мин бәхетле. Эйәлек(зат) ялғауҙары | 09.11 | | |
| 19 | 6.4 | Иртәнге аш. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. | 12.11 | | |
| 20 | 6.5 | Һауыт- һаба. Кәрәк –кәрәкмәй.Эйәлек ялғауҙары. | 16.11 | | |
| | | 7. Аҙыҡ-түлек. | | | |
| 21 | 7.1 | Аҙыҡ-түлек. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. | 19.11 | | |
| 22 | 7.2 | Кем нимә ярата? Килеш ялғауҙары (төбәү килеш) | 23.11 | | |
| 23 | 7.3 | Икмәк-ил байлығы. Килеш ялғауҙары (төшөм килеш) | 26.11 | | |
| 24 | 7.4 | Ашығыҙ тәмле булһын! Килеш ялғауҙары (урын-ваҡыт килеш) | 30.11 | | |
| 25 | 7.5 | Төшкө аш. Сәғәт.Ваҡыт. | 03.12 | | |
| 26 | 7.6 | Ф.Туғыҙбаева “Сәй эсеү”. Һөйләмдә һүҙҙәрҙең урыны. | 07.12 | | |
| | | 8.Ҡайҙа? Ҡайҙан? | | | |
| 27 | 8.1 | Ҡайҙа ? һорауы. Килеш ялғауҙары (төбәү килеш) | 10.12 | | |
| 28 | 8.2 | Ҡайҙан? Һорауы. Килеш ялғауҙары (сығанаҡ килеш) | 14.12 | | |
| 29 | 8.3 | Г.Ғәлиуллина “Бесәйем”. Килеш ялғауҙары (төбәү килеш) | 17.12 | | |
| | | 9.Нимә менән? | | | |
| 30 | 9.1 | Нимә менән? Һорауы. Менән һүҙен практик | 21.12 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | ҡулланыу. | | | |
| 31 | 9.2 | Дуҫтарыма ярҙам итәм. Хәбәрҙең һөйләмдәге урыны. | 24.12 | | |
| | | 10.Һанай беләһенме? | | | |
| 32 | 10.1 | Һандар. Кем булып эшләй? Һорауын үҙләштереү. | 28.12 | | |
| 33 | 10.2 | .Аҙыҡ –түлек магазинында. | 14.01 | | |
| 34 | 10.3 | Нисә һум тора? Һорауы. | 18.01 | | |
| | | 11. Кейем-һалым. | | | |
| 35 | 11.1 | Хаҡы күпме? Килеш ялғауҙары(эйәлек килеш) | 21.01 | | |
| 36 | 11.2 | Кейем-һалым магазинында. Күплек ялғауҙары. | 25.01 | | |
| 35 | 11.3 | Әсәй күлдәк һатып ала. Һеҙгә нимә күрһәтергә? һорауы | 28.01 | | |
| 38 | 11.4 | Үлсәме ниндәй? Зат алмаштары. | 01.02 | | |
| 39 | 11.5 | Яңы кейем-яңы шатлыҡ. Ҡылымдың ялғауҙары. | 04.02 | | |
| | | 12. Уйындар , уйынсыҡтар. | | | |
| 40 | 12.1 | Бүләккә-яңы күлдәк. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 08.02 | | |
| 41 | 12.2 | Уйынсыҡтар магазины. Ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар. | 11.02 | | |
| 42 | 12.3 | Уйындар. Эйәлек алмаштары. | 15.02 | | |
| | | 13. Һөнәрҙәр. | | | |
| 43 | 13.1 | Үҫкәс кем булаһың? Ҡылымдың зат ялғауҙары. | 18.02 | | |
| 44 | 13.2 | Нимә? Кем? -сы,-се ялғауҙары. | 22.02 | | |
| 45 | 13.3 | Беҙ нимә эшләйбеҙ? Ҡылымдың зат ялғауҙары. | 25.02 | | |
| 46 | 13.4 | Һеҙ нимә эшләйһегеҙ? Ҡылымдың зат | 01.03 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | ялғауҙары. | | | |
| 47 | 13.5 | Улар нимә эшләйҙәр? Ҡылымдың зат ялғауҙары. | 04.03 | | |
| | | 14.Тән өлөштәре. | | | |
| 48 | 14.1 | Тән өлөштәре. Эйәлек ялғауҙары. | 11.03 | | |
| 49 | 14.2 | Ҡайһы ереӊ ауырта? Зат алмаштары. | 15.03 | | |
| 50 | 14.3 | Һаулыҡ һаҡлау. Эйәлек алмаштары. | 18.03 | | |
| 51 | 14.4 | Беҙҙеӊ баҡса. Ниндәй ? һорауы. | 22.03 | | |
| | | 15. Еләк-емеш,йәшелсә. | | | |
| 52 | 15.1 | Ниндәй? һорауы .К.Ушинский “Дарыу”. Һөйләмдә һүҙҙәрҙеӊ урыны. | 01.04 | | |
| 53 | 15.2 | Бигерәк унды сөгөлдөр. Күплек ялғауҙары. | 05.04 | | |
| 54 | 15.3 | Баҡсалағы эштәр. Һөйләмдә хәбәрҙеӊ урыны. | 08.04 | | |
| 55 | 15.4 | А.Игебаев “Иртә-кис”. Һөйләмдә һүҙҙәрҙеӊ урыны. | 12.04 | | |
| | | 16. Таҙалыҡ. | | | |
| 56 | 16.1 | Һабын менән дуҫ бул. Ҡайҙа? Ҡайҙан? һорауҙары. | 15.04 | | |
| 57 | 16.2 | Таҙалыҡ һаҡлау. Килеш ялғауҙары ( төбәү килеш) | 19.04 | | |
| | | 17.Көн тәртибе. | | | |
| 58 | 17.1 | Минеӊ көн тәртибем. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 22.04 | | |
| 59 | 17.2 | Әсәйемә ярҙам итәм.Ҡылымдын күплектәге 1-се зат ялғауҙары. | 26.04 | | |
| 60 | 17.3 | Һаулыҡ-ҙур байлыҡ. –ма,-мә ялғауҙары. | 29.04 | | |
| 61 | 17.4 | Тәртип һәр саҡ кәрәк. Ҡапма-ҡаршы һүҙҙәр. | 03.05 | | |
| 62 | 17.5 | Ярҙамсы. Башҡорт теленеӊ өндәре. | 06.05 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 63 | 17.6 | Башҡорт теленең һуҙынҡылары һәм тартынҡылары. | 10.05 | | |
| 64 | 17.7 | Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. | 13.05 | | |
| 65 | 17.8 | “Йәшерәм яулыҡ”, “Аҡ ҡалас”, “Һәпәләк”. Уйындар. | 17.05 | | |
| 66 | 17.9 | Контроль күсереп яҙыу. “Урманда”. | 20.05 | | |
| 67 | 17.10 | Хаталар өҫтөндә эш. “Кем?Нимә?” һорауҙары . | 24.05 | | |
| 68 | 17.11 | Йомғаҡлау дәресе. | 27.05 | | |

Прошнуровано и пронумеровано

10 (десять) листов

«___» ___________ 201_ г.

Директор ______________ А.А. Афанасьев